

*Нәзир ҠОЛБАХТИН,*
*тарих фәндәре докторы*

# 1773—1775 ЙЫЛДАРҘАҒЫ КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫ ЮЛБАШСЫЛАРЫ

## ҠӘНЗӘФӘР ҺӘМ БӘХТЕЙӘР

*Баш күтәреүселәр армияһының Өфө өйәҙе мишәрҙәренән ике баш полковнигы булған. Уларҙы милли тамырҙары ғына түгел, ихтилал эшмәкәрлегендәге оҡшаш һыҙаттары ла берләштерә. Улар беренселәр иҫәбендә Берда үҙәгенә килә. Кинйә ризалығынан «батшаға» күренә, уның ҡулынан юғары чиндар ала (Ҡәнзәфәр — полковник, Бәхтейәр — тәүҙә поход старшинаһы) һәм Пугачевтың манифесы менән төньяҡ Башҡортостанға, был төбәктең күп милләтле халҡын баш күтәреүселәр армияһына йәлеп итеү, ихтилалды яңы биләмәләргә таратыу өсөн ебәрелә. Улар баш күтәреүселәр хәрәкәтенең һәләтле ойоштороусылары була, тотош халыҡты ихтилалға йәлеп итеү һәм азат ителгән биләмәләрҙә тыныс тормошто аяҡҡа баҫтырыу оҫталығын үҙләштерә. Шуның менән бергә улар полководец сифаттарына эйә булмай. Күп һандағы бәрелештәрҙең береһендә генә лә улар ҙур еңеүгә өлгәшмәй, хәрби ойоштороу талантын күрһәтмәй.*

*Әммә уларҙың азатлыҡ көрәшендә, тормош юлында шәхси айырмалыҡтары ла күп. Әгәр Ҡәнзәфәрҙең милли сығышы һәм йәшәгән урыны асыҡ билдәле булһа, Бәхтейәрҙең ниндәй этносҡа ҡарауы хәҙергә тиклем бәхәстәр тыуҙыра. Ҡәнзәфәр үҙенең көрәштәштәре менән, уларҙың милләтенә һәм диненә, дәрәжәһенә һәм вазифаһына ҡарамай, һыйышып, дуҫ, татыу йәшәү оҫталығына эйә булған. Бәхтейәр иһә, киреһенсә, ғауғаһы, барыһы менән ыҙғыш, талаш тыуҙырыусы. Бәхтейәр иң киҫкен мәлдә отрядын ташлап, билдәһеҙ йүнәлештә китеп юғала һәм уның артабанғы яҙмышы билдәле түгел. Ҡәнзәфәр әсир төшә, ғазаплауҙарға батырҙарса түҙә, тамуҡты үтеп сыға, 29 йыл каторга золомон кисерә һәм 66 йәшендә тыуған иленән алыҫта, ҡартайған тотҡон хәлендә яҡты донъя менән хушлаша.*

*Был очерктың маҡсаты — тарихи ғәҙеллекте аяҡҡа баҫтырыу һәм мишәр халҡының бөйөк улдарының береһе, 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының күренекле етәксеһе Ҡәнзәфәр Усаевтың яҡты исемен киләһе быуындарға ҡайтарып биреү. Бер үк ваҡытта автор шулай уҡ киң танылған Бәхтейәр Ҡанҡаевтың ниндәй милләткә ҡарауын, дөйөм халыҡ көрәшенә индергән өлөшөн һәм урынын асыҡлап китергә уйлай.*

## Ҡәнзәфәр Усаев

Баш күтәреүселәр армияһы полковнигы Ҡәнзәфәр Усаев Боҙаяҙ ауылының (хәҙер Ҡырмыҫҡалы районында) сотнигы сифатында старшина Ишмөхәмәт Сөләймәнов командаһында хеҙмәт иткән.[1] Ауылдаштары уны «мулла» тип атаған, сөнки ул заманына күрә белемле кеше булған — төрки һәм рус телдәрендә уҡыған һәм яҙған.

Пугачев Ырымбурҙы ҡамап алғас, губернатор Рейнсдорп указы буйынса башҡорттарҙы һәм мишәрҙәрҙе язалау командаларына йыя башлайҙар. Ҡәнзәфәрҙе лә яллайҙар һәм старшина Ишмөхәмәт Сөләймәнов командаһында Ырымбурға оҙаталар. Әммә Стәрлетамаҡ пристаненә барып етмәҫтән ул ҡаса.[2] Өйгә ҡайтҡас, Ҡәнзәфәр старшина Йәғәфәр Көсөкәев һәм Боҙаяҙ ауылынан тағы алты мишәр менән бергәләшеп Бердаға юлланалар. Бердаға улар 1773 йылдың ноябрендә килеп етәләр. Ырымбур янында Ҡәнзәфәр бер ай самаһы тора. Тәфтишсегә яуап биргәндә ул Ырымбур эргәһендәге бәрелештәрҙә ҡатнашҡанын, шуның өсөн «полковник чины бирелеүен» таный.[3] Һуңынан, Ҡазан Йәшерен комиссияһында, ул киңерәк мәғлүмәт бирә. Пугачев менән әңгәмәләшкәндән һуң, башҡорт ғәскәре старшинаһы Кинйә Арыҫланов саҡыртыла, «батша» килгән кешеләрҙе Кинйәнең командаһына алырға һәм уға әйтмәйенсә бер ҡайҙа ла ебәрмәҫкә ҡуша; шулай ул бер ай самаһы Бердала башҡорт старшинаһы янында писарь вазифаһында хеҙмәт итә, Ырымбур янындағы алыштарҙа ҡатнаша һәм тырышлығы өсөн полковник чины ала.[4]

Декабрь башында 8 кешелек ҙур булмаған отряд менән полковник Ҡәнзәфәрҙе Пугачев «Өфө өйәҙенә халыҡты ҡотортоу, янына халыҡ төркөмөн йыйыу һәм Пугачевтың ысын Петр Федорович икәненә ышандырыу» өсөн өгөтләргә ебәрә.[5] Тимәк, Ҡәнзәфәр иң тәүге Пугачев эмиссарҙары иҫәбендә ихтилал биләмәләрен киңәйтеү өҫтөндә эшләргә тейеш булған. Ул төньяҡ Башҡортостанға, тау заводтары тупланған төбәккә йүнәлгән. Халыҡ ихтилалын ойоштороусының сағыу таланты шунда асыла.

1773 йылдың декабрендә Осокиндарҙың Үрген заводы аша үткәндә ул Богородское ауылында отставкалағы аҡһаҡ һалдатты осрата һәм үҙенең отрядына ала. Тәүге көндәрҙән үк был һалдат ғәҙәттән тыш етәкселек һәләттәрен күрһәтә һәм ғәжәп оҫта хәрби командир булып сыға. Ҡәнзәфәр уға 25 кешелек отряд бүлеп бирә һәм үҙаллы хәрәкәт итергә ҡуша. Ул Екатеринбург тау ведомствоһы районына юллана. Бик тиҙҙән бер завод артынан икенсеһен һөжүм итеп алған Пугачев полковнигы һәм атаман Иван Белобородовтың етәкселегендәге баш күтәреүселәр корпусының яңғырауыҡлы еңеүҙәре тураһындағы хәбәр һәм дан бөтә Урал буйлап тарала. Был Ҡәнзәфәр үҙаллы көрәшергә фатихаһын биргән отставкалағы аҡһаҡ һалдат булып сыға. Шулай итеп,

Крәҫтиәндәр һуғышының иң танылған полководецтарының береһе Белобородовты Ҡәнзәфәр «асҡан».

Төньяҡ Башҡортостанға килгәс, Ҡәнзәфәр күп милләтле төбәк халҡын баш күтәреүселәр отрядтарына туплау буйынса әүҙем эшмәкәрлек йәйелдерә. Башҡорт етәкселәре Батырҡай Иткинин, Әбдей Абдулов, Бәхтейәр Ҡанҡаев, Ишмән Этҡолов һ.б. уның арҡаҙаштары була. Улар Көңгөргә яу әҙерләй башлай. 1774 йылдың 9 ғинуарында тәүге һөжүм яһала. 12 ғинуарҙа Красноуфимск ҡәлғәһенә 800 кешелек сиреүе менән Салауат килә һәм төньяҡ Башҡортостандағы ихтилалға етәкселек итә башлай. Бер аҙ ваҡыттан һуң бында Табын казагы, баш күтәреүселәр армияһы бригадиры И.С.Кузнецов килә. Документтарҙан күренеүенсә, Кузнецов, Салауат һәм Ҡәнзәфәр араһында үҙ-ара ихтирамлы мөнәсәбәт урынлаша. Красноуфимск—Көңгөр төбәгендә баш күтәреүселәрҙең дөйөм һаны 4 мең кешегә етә. 1 мең самаһы рус милләтле баш күтәреүселәрен Кузнецов үҙенә ала, ә 3 меңдән ашыу башҡорт, мишәр, татар баш күтәреүселәрен Салауатка бирә. Ҡәнзәфәр шулай йәш полководецтың отрядына эләгә. 19 ғинуарҙа улар бергәләп Көңгөр гарнизонына өндәмә яҙа һәм казак И.Дружининды шул өндәмә менән өгөтләргә тип ҡалаға ебәрәләр. Ҡәнзәфәр шулай уҡ 23 һәм 24 ғинуарҙа Салауат Көңгөргә ойошторған һөжүмдәрҙә ҡатнаша. Салауат яраланып, өйөнә дауаланырға ҡайтып киткәс, Кузнецов Ҡәнзәфәрҙе ҡулға ала һәм, бығаулап, Чесноковкаға оҙата. Ҡәнзәфәрҙе завод ҡаҙнаһын тартып алыуҙа, сиркәү ҡыңғырауҙарын алдырыуҙа һәм Ачит ҡәлғәһе коменданты капитан Воиновты язалауҙа ғәйепләйҙәр. Ҡәнзәфәр Пугачев эмиссары була, төньяҡ Башҡортостанда хәрәкәт итеү өсөн полковник чинын һәм манифесты уға «батша» үҙе бирә. Шуға Зарубин уны хөкөм итә алмай һәм Бердаға оҙата. Бердала Пугачев Ҡәнзәфәрҙе барлыҡ ғәйепләүҙәрҙән азат итә лә яңынан төньяҡ Башҡортостанға ебәрә. Был юлы Ҡәнзәфәр ҙур ғәскәр туплап, атаман Белобородовҡа ярҙамға барырға тейеш була. Уны 7 кеше оҙата бара.[6]

Белобородовҡа барғанда Ҡәнзәфәр 24 марттан 25-енә ҡаршы төндә Чесноковка ауылында, Зарубин штабында туҡтай. Был төндө Зарубиндың баш күтәреүселәр армияһы менән подполковник И.И.Михельсондың корпусы һуғыша. Зарубин еңелеүгә осрай, уның армияһы юҡ ителә, үҙе әсир төшә. Комиссияла Ҡәнзәфәр был алыш ваҡытында ҡасып киткәнен, ике аҙна ауылдарҙа йәшеренгәнен, «бурҙар төркөмдәре менән бәйләнеш тотмағанын» хәбәр итә.[7]

Әммә уның ауылдаштары, мишәр старшиналары Мөксин Әбдесәләмов менән Ишмөхәмәт Сөләймәнов губернатор Рейнсдорпҡа, Чесноковка янындағы алышта Ҡәнзәфәр әсир төшә, ләкин «башҡа фетнәселәргә һәм хыянатсыларға ҡушылмау шарты менән» азат ителә, тип рапорт бирә. Информаторҙар уның Боҙаяҙға ҡайтыр алдынан 15 көн ҡайҙа йөрөгәнен белмәй.[8] Ҡазан Йәшерен комиссияһында Ҡәнзәфәр һуғышта ҡатнашыуын, ҡулға алыныуын, әммә Михельсондың уны

ебәреүен, уны мишәр старшинаһы Солтан-Моратовтың яҡлап сығыуын таный.[9]

Ә был ваҡытта Ҡәнзәфәр Бердаға Пугачев эргәһенә ашыға һәм улар Төп ғәскәр генерал Голицын корпусы менән Татищев ҡәлғәһе янында яуға ингәндән һуң осрашҡандыр, моғайын. Пугачев полковниктары Т.Падуров менән М.Горшков күрһәтмәләрендә Пугачевтың Татищев ҡәлғәһе янында еңелгәндән һуң Кинйә менән Ҡәнзәфәрҙең кәңәше буйынса Башҡортостанға китергә йыйынғанлығы әйтелә. Пугачев Зарубин менән ҡушылыу өсөн Чесноковкаға барырға ниәтләй.[10] Әммә бер нисә көн Ташлыла булғандан һуң ҡырҡа ғына Башҡортостандың Урал аръяғына юллана. Зарубиндың Өфө эргәһендә еңелеүен Ҡәнзәфәрҙең хәбәр итеүе маршрутты киҫкен үҙгәртеүҙең сәбәбе булыуы ихтимал.

Пугачев Урал аръяғына юлланғанда Ҡәнзәфәрҙе Башҡортостандың үҙәгенә халыҡты ихтилалға күтәреү өсөн ебәрә. Мөксин менән Ишмөхәмәттең әйтеүенсә, ул апрель урталарында тыуған ерҙәрендә күренә һәм, генерал Фрейман өсөн, тип, уларҙың 500 кешелек команда биреүен талап итә. «Тоғро» старшиналар Ҡәнзәфәргә ҡаршы ниндәй сара ҡулланырға белмәй һәм губернаторҙан кәңәш һорай. Рейнсдорп Ҡәнзәфәрҙең 200 кешелек отряды менән яуызлыҡтар ҡылып йөрөүе хаҡында Өфө провинцияһы канцелярияһына хәбәр итеп, «уны, Ҡәнзәфәрҙе тоғро мишәр һәм башҡа старшиналарҙан тоттороп, ҡаты ҡарауылда тотоуҙы һәм тотҡас та үҙенә рапорт биреүҙе» талап итә.[11]

Ҡәнзәфәрҙе Мөксин менән Ишмөхәмәт тотоп ала. Уны, колодкалар кейҙертеп, Өфөгә алып китәләр. Әммә барып етергә оҙаҡ ҡалмаҫтан, бер сыуаш ауылында ул колодкаларын сисеп ташлап ҡаса.[12] 28 майҙа Ишле ауылы татарҙары Өфө провинцияһы канцелярияһына уларҙың ауылына Ҡәнзәфәрҙең килгәнен һәм һәр ихатанан яуға берәр кеше алыуын хәбәр итә.[13] Яңы отряд йыйыу төбәге итеп Ҡәнзәфәр үҙенең тыуған Дыуан-Табын олоҫон һайлай. 5 июндә ул Пугачевҡа яңы отряд алып килә. Шунда, Әй йылғаһында, Пугачев уға бригадир чинын бирә, ә Хәрби коллегия Пугачев өндәмәһен халыҡҡа иғлан итеү тураһында Указ тапшыра.[14]

Ошо ваҡиғанан һуң Ҡәнзәфәр Нуғай даруғаһына әйләнеп килә һәм Ҡаранай, Ҡасҡын, Ҡанбулат, Ҡотлогилде һәм Һеләүһен менән бергә Өфөгә яу менән барыу өсөн ҡатнаш отрядҡа кешеләр туплай башлай. Ул Нуғай даруғаһы баш күтәреүселәренең иң ҙур етәкселәренең береһенә әйләнә. Ҡазан Йәшерен комиссияһы начальнигы генерал П.С.Потемкин Екатерина Икенсегә ебәргән белдермәһендә Ҡәнзәфәрҙе «Пугачевтың иң төп енәйәттәше» тип атай.[15]

1774 йылдың 20 июнь тирәһендә Ҡәнзәфәр йәнә Пугачев Ставкаһына килә. Пугачев үҙе был ваҡытта Уса янында һуғыша. Ҡәнзәфәр Пугачевҡа Башҡортостандағы ваҡиғалар тураһында тулы мәғлүмәт тапшыра. Пугачев уға 50 һум аҡса бирә.[16] 23 июндә Ҡәнзәфәр, Пугачев Өндәмәһен һәм Хәрби коллегия грамотаһын алып, 4 казак оҙатыуында Өфөгә юллана.[17] Яуап тотҡанда был хаҡта асыҡтан-асыҡ һөйләй:

«Ә һуңынан Пугачевтан үҙ теләгем буйынса тыныс йәшәгән халыҡты ҡотортоу һәм төркөмдәргә туплау өсөн Башҡортостанға киттем... Һәм, төркөм йыйғас, Өфөгә һөжүм итергә һәм Рәсәй ғәскәрҙәрен ҡыйратырға теләнем».[18] Ҡәнзәфәр Пугачевтың Ҡазанға барышлай башҡорт полковниктары төркөмөнә Башҡортостанға ҡайтырға һәм, халыҡты ихтилалға күтәреп, шуның менән Төп ғәскәрҙең арьергардын тәьмин итергә ҡушыуын да асып һала.[19]

Башҡортостанға ҡайтҡас, Ҡәнзәфәр Ыҡ һәм Дим йылғалары бассейндарында отряд йыя башлай, 400 яугирҙы туплай, Нуғай даруғаһының башҡорт етәкселәре менән бәйләнеш булдыра һәм Өфөгә яу сабырға әҙерләнә. 24 июлдә Өфө провинцияһы канцелярияһы генерал Голицынға рапорт ебәреп, был етәкселәр, 1000 кешене йыйып, «Ағиҙел менән Ашҡаҙар йылғалары араһындағы далала торалар, Өршәк һәм Дим йылғалары араһында йәшәүселәрҙе ҡыйратырға йыйыналар, тиҙәр»,[20] тип хәбәр итә. Шул уҡ көндө старшина Ишмөхәмәт Сөләймәнов Өфө провинцияһы канцелярияһына: "Ҡәнзәфәр иртәгә Боҙаяҙ ауылына барырға йыйына, тип ишетелә», тигән хәбәр тапшыра.[21]

Ҡәнзәфәр Өфөгә яу ойоштора алмай. 4 августа Ярмолкино ауылы янында уны «тоғро» башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас әсир итә. Һорау алғанда Ҡәнзәфәр уны башҡорт старшинаһы Ҡыҙрастың Ҡәнзәфәр янында үҙ теләге менән йөрөгән өс мишәр кешеһе ярҙамында тотоп алыуын хәбәр итә.[22] Шулай итеп, ул хыянат ҡорбаны була. Әммә Ҡыҙрастың Өфө провинцияһы канцелярияһына 31 августа биргән рапортында Ҡәнзәфәрҙең алыш мәлендә әсир ителеүе әйтелгән. Уның командаһында старшиналар Ибраш Ураҙбахтин, Ҡунаҡҡол Атъетәров һ.б. һуғышҡан, ләкин улар «Ҡәнзәфәр бурҙы тотҡанда ҡасҡан».[23] Тәүге тапҡыр Ҡәнзәфәрҙән 4 августа Бөгөлмәлә, полковник Н.Н.Кожиндың поход канцелярияһында һорау алалар. Протокол материалдарынан күренеүенсә, ул үҙен ышаныслы тота, бирелгән һорауҙарға аныҡ яуаптар бирә. Яуаптарында ҡурҡыу, үкенеү, ярамһаҡланыу, нисек кенә булһа ла йәнен һаҡлап алып ҡалырға тырышыуҙың эҙе лә булмай. Шуға ҡарамаҫтан, айырым осраҡтарҙа ҡайһы бер эштәрен һәм һуғыш хәрәкәттәрен оҫта йәшереп алып ҡала белгән.

Бөгөлмәнән Ҡәнзәфәрҙе Ҡазан Йәшерен комиссияһына алып киләләр һәм туҡтауһыҙ язалап һорау алалар.[24] Ҡазандан Мәскәүгә, Сенаттың Йәшерен экспедицияһына, Екатерина Икенсенең иң яуыз язалаусыһы С.Шешковский ҡарамағына оҙатыла. Сенат пугачевсыларҙы ике төркөмгә бүлеп билдәләй. Беренсе төркөмгә — Пугачев һәм уның иң яҡын көрәштәше А.Перфильев, икенсе төркөмгә 8 кеше ҡарай, Ҡәнзәфәр ҙә шул иҫәптә була. 1774 йылдың 31 декабрендә Сенаттың хөкөм ителгәндәргә язалау сараларын билдәләүсе указы сыға: Пугачев менән Перфильевтың аяҡ-ҡулдарын һәм башын киҫергә, И.Зарубиндың Өфөлә башын киҫергә. М.Шигаевты, Т.Падуровты һәм В.Торновты аҫырға, һигеҙ пугачевсыны ҡамсы менән һуҡтырырға һәм мәңгелеккә каторгаға һөрөргә.[25] Һуңғылары иҫәбендә Ҡәнзәфәр ҙә була.

1775 йылдың 10 ғинуарында Мәскәүҙең Болотный майҙанында (Лобное место) Пугачевты язалайҙар. Майҙан халыҡ менән шығрым тула. Ялған батшаны нисек язалауҙарын ҡарау өсөн Ҡазандан Ҡаранайҙы килтерәләр, тотҡон пугачевсыларҙы төрмәнән алып сығалар. Шулай итеп, властар үҙҙәре көрәштәштәренә Пугачевты һуңғы юлға оҙатыуҙы ойоштора.

1775 йылдың 11 ғинуарында мәңгелек каторгаға хөкөм ителгән пугачевсыларҙы Мәскәүҙән алып сығып, алыҫ Балтийский (Палдиски) портына оҙаталар. Улар йәмғеһе 8 кеше була: Ҡәнзәфәр Усаев, И.Почиталин, М.Горшков, И.Ульянов, Д.Караваев, А.Долгополов, Г.Закладнов һәм В.Плотников. Закладнов менән Плотников юлда вафат була, уларҙы Ревель (хәҙер Таллинн) ҡалаһында ерләйҙәр. Ҡалған 6 пугачевсы мәңгелек каторга урынына барып етә.[26] 1775 йылдың 29 ноябрендә уларға Салауат менән Юлай ҡушыла. Ҡәнзәфәр әсир ителгәс, уның ауылдашы, мишәр старшинаһы Мөксин Әбдесәләмов Өфө провинцияһы канцелярияһына мөрәжәғәт итеп, уның йортон һәм хужалығын үҙенә алырға рөхсәт һорай, сөнки Ҡәнзәфәр 1774 йылдың йәйендә Мөксиндең һәм уның энеһе Йәмғурҙың хужалығын бөлгөнлөккә төшөргән була.[27]

Ҡәнзәфәр менән Салауат Ырымбур эргәһендә Кинйәнең башҡорт полкында бергә хеҙмәт итәләр, Ырымбурға бергә һөжүм ойошторалар һәм дошман яуын кире ҡағалар, бергә хәрби етәкселәр булып өлгөрәләр. 1774 йылдың башында Красноуфимск—Көңгөр баш күтәреү төбәгендә яҙмыш уларҙы тағы бер тапҡыр осраштыра, улар бергәләп Көңгөрҙө һөжүмгә тотоуҙы ойоштора. Уларҙың 1774 йылдың йәйендә Әй йылғаһындағы Пугачев ставкаһында һәм Уса ҡалаһы янында осрашыуҙары ла ихтимал. Өсөнсө тапҡыр улар Рогервикта осраша һәм мәңгегә бергә ҡала.

1800 йылдың 26 сентябрендә башҡорт халҡының легендар улы Салауат яҡты донъя менән хушлаша. Мосолман йолаһы буйынса, уның баш осонда диндәше һәм фекерҙәше, көрәш буйынса арҡаҙашы Ҡәнзәфәрҙең көнө-төнө доға уҡып ултырыуын күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Сөнки ул белемле мосолман булған, уны тиккә генә «мулла» тип атамағандар бит. Ҡәнзәфәр башҡорт халҡының милли батырын һуңғы юлға оҙатҡан. Шуның өсөн генә лә башҡорт халҡы, Салауат вариҫтары Ҡәнзәфәрҙең яҡты исемен күңелендә мәңге һаҡларға тейеш.

Ҡәнзәфәр 1804 йылдың 10 июлендә был донъяны ҡалдырып китә. Һуңғы минуттарын япа-яңғыҙы үткәрә. Был ваҡытҡа пугачевсыларҙың барыһы ла үлеп бөткән һәм иң һуңғыһы булып Рогервик ҡәлғәһендә Ҡәнзәфәр ҡалған була. Ул 29 йыл каторга ғазаптарын кисерә. Ул туған халҡының азатлығы һәм бәхете өсөн, Башҡортостандың барлыҡ иҙелгән халыҡтарының яҡты киләсәге өсөн көрәштәге рухы кеүек, ҡоростай сыныҡҡан була.

## Бәхтейәр Ҡанҡаев

Бәхтейәр Ҡанҡаев 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында иң сағыу һәм иң үҙенсәлекле шәхестәрҙең береһе булған. Уның ихтилал барышындағы ғәҙәти булмаған хәрәкәттәре, серле рәүештә юҡҡа сығыуы һәм артабанғы яҙмышының билдәһеҙ булыуы ғына түгел, ниндәй милләткә ҡарауы ла ҡыҙыҡһындыра. Ике быуаттан ашыу тарихсылар Бәхтейәрҙең тыуған ерен асыҡлай алмай. Хатта Крәҫтиәндәр һуғышы тураһындағы фундаменталь йыйынтыҡтарҙа уның тураһында «Ҡазан өйәҙе мишәре» тип яҙҙылар.[28] Бары тик XX быуаттың 70-се йылдары аҙағында ғына Ҡазан тарихсыһы С.Х.Алишев үҙенең хеҙмәттәрендә Бәхтейәрҙең Себер даруғаһының Аҡа ауылы кешеһе икәнлеген асыҡланы.[29] Ошо мәғлүмәттәргә таянып, Б.С.Дәүләтбаев ышаныслы рәүештә Бәхтейәрҙең Мәсетле районының Оло Аҡа ауылы мишәре икәнлеген иҫбат итә.[30]

Һаҡланып ҡалған сығанаҡтарҙа Бәхтейәрҙең милли сығышы үтә ҡаршылыҡлы күрһәтелгән. Е.И.Пугачевтың һәм Хәрби коллегияның манифестарында һәм указдарында ул «мишәр полковнигы»[31] тип атала. Ҡазан Йәшерен комиссияһында һорау алғанда мари Иҙебай Акбаев та Бәхтейәрҙе мишәр полковнигы тип атай.[32] Бер төркөм көрәштәштәре Бәхтейәрҙе башҡорт тип таныған. Салауат Мәскәүҙә Йәшерен экспедицияға хәбәр итеүенсә, 1773 йылдың декабрендә уның артынан ебәрелгән кешеләр «... Красноуфимск ҡәлғәһен ҡамауға алыусы башҡорттар Грязнов полковник тип иғлан иткән Собханғол менән Бәхтейәр була».[33] Өфө өйәҙе Ҡаршы ауылы татары, Бәхтейәрҙең поход канцелярияһы писары Әбүбәкер Кләнсев тәфтишсегә уны «башҡорт Бәхтейәр Канкендеев» тип атай.[34] Баш күтәреүселәр армияһы атаманы Алладин Биктуғанов, Абдулла Мәжитов, Өмөтбай Абдрахманов, Раҡай Ғәлиев, Юмаҡай Асҡаров, Оси Буртюков, мариҙар Иштубай Ишбулатов менән Кенәз Тоҡмурзин да Бәхтейәрҙе башҡорт тип таныған.[35]

Бәхтейәрҙең милләте тураһындағы ҡаршылыҡлы информация Аҡа ауылының (Оло Аҡа, Большая Ока) ул ваҡытта күп милләтле булыуы менән аңлатыла. Б.С.Дәүләтбаевтың иҫәпләүенсә, 1802 йылда Оло Аҡала йәмғеһе 660 кеше, шул иҫәптән 17 башҡорт, 517 мишәр, 127 типтәр йәшәгән.[36] Бәхтейәр ошо ауылдың аҫаба башҡорто йәки типтәре булыуы мөмкин. Нисек кенә булмаһын, Пугачевтың, Хәрби коллегия ағзаларының мәғлүмәттәре Бәхтейәр менән иңгә-иң терәшеп һуғышҡан, күп айҙар буйына тығыҙ аралашҡан башҡорттар менән татарҙарҙың раҫлауҙарына ҡарағанда аҙыраҡ ышандыра.

Крәҫтиәндәр һуғышы башланғанда Бәхтейәр урта йәштәрҙә булған. 1765 йылда мулла Бәхтейәр Ҡанҡаев Аҡа кешеләренең үҙ ерҙәренә типтәрҙәрҙе индереүе тураһында килешеү төҙөүҙә ҡатнашҡан.[37] Быңдай килешеүҙе аҫаба башҡорттар ғына төҙөй алған. Б.С.Дәүләтбаев фараз итеүенсә, 1765 йылдағы документта осраған Бәхтейәр Ҡанҡаев менән ихтилалда ҡатнашыусы бер үк кеше. Был фекер дөрөҫкә тура килә. Дөйөм белемһеҙлек шарттарында Бәхтейәрҙең төрки һәм рус грамота-

һын белеүе лә шул фекерҙе раҫлай: Оло Аҡа ауылынан Бәхтейәр мулла һәм 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышының баш күтәреүселәр армияһы полковнигы Бәхтейәр Ҡанҡаев бер үк кеше. Ҡошсо олоҫо башҡорттары ер аҫабалары булып ҡалған һам уларҙың вәкилдәре генә типтәрҙәрҙе индереү тураһындағы килешеү төҙөүҙә ҡатнашҡан. Әммә документ «Өфө өйәҙе Себер даруғаһы Аҡа ауылынан старшина Солтанморат (Янышев) командаһы, беҙ, мишәрҙәр» тип башланып китә, ә һайланма вәкилдәр исемлегенә «һайланма башҡорт *Иҙелбай Шүлгәнов*» (курсив беҙҙеке. — *Н.Ҡ.)* етәкселек итә.[38] Исемлек һайланма кешеләр араһындағы берҙән-бер белемле башҡорт муллаһы Бәхтейәр Ҡанҡаевтың исеме менән тамамланыуы ихтимал.

1773 йылдың ноябрь аҙаҡтарында Себер даруғаһы Ҡошсо олоҫоноң Аҡа ауылы кешеһе Бәхтейәр Ҡанҡаев ауылдашы Әбделкәрим Күҫәкәев менән бергә Берда биҫтәһенә, Пугачев ставкаһына килә. Кинйә штабында бер нисә көн булғандан һәм «батша» аудиенцияһына ирешкәндән һуң, Бәхтейәр — полк старшинаһы, ә Ғәбделкәрим полктың йөҙ башлығы чинын ала. Бәхтейәр менән Ғәбделкәримдең килеүе Пугачев эмиссарҙарына «полковник» чиндарын һәм Пугачев өндәмәләрен биреп, Башҡортостандың төрлө райондарына ебәреү ваҡытына тура килә: Ҡасҡын — Өфөгә, Грязнов — Иҫәт провинцияһына, Ҡәнзәфәр — Көңгөргә, Салауат — Себер даруғаһына, Ҡаранай Минзәләгә юллана.

Бәхтейәрҙең ошо беренсе эмиссарҙар иҫәбендә булыуы ла ихтимал. Пугачев өндәмәһе уны 1773 йылдың 3 декабрендә Воскресенск заводында уҡ ҡыуып етә.[39] «Е.И.Пугачев ставкаһының, баш күтәреүсе властарҙың һәм учреждениеларҙың документтары» йыйынтығын төҙөүселәр был мәғлүмәттең донъя күреү ваҡытын аныҡ билдәләмәгән. Ул Зарубиндың указын Бәхтейәргә 1773 йылдың 3 декабрендә биреү ваҡытына ҡарап иҫәпләнә. Тимәк, ваҡиғалар түбәндәге тәртиптә барған: Бәхтейәр төньяҡ Башҡортостанға төбәктең күп милләтле халҡын ихтилалға күтәреү өсөн ебәрелгән, әммә баш күтәреү үҙәге ни сәбәптәндер уны документтар менән тәьмин итмәгән. Бәлки, Пугачев Ставкаһы ундай системаны һуңынан эшкә индергәндер. Тәғәйенләнгән районға барған юлында Бәхтейәр Воскресенск заводына, Зарубинға инеп сыға, ул Пугачевтың планы буйынса Башҡортостан территорияһында баш күтәреүселәр хәрәкәтенә етәкселек итергә һәм Бәхтейәр һуңынан уға ҡушылырға тейеш була. Бында, 3 декабрҙән дә һуңға ҡалмайынса, уны Пугачевтың исемле өндәмәһе менән атсабар ҡыуып етә. Өндәмә иҫке төрки телендә яҙылған. 1774 йылдың июлендә Хәрби коллегия ағзалары уға: «Был манифест полк старшинаһы Бәхтейәр Ҡанҡай улына, полктың йөҙ башлығы Ғәбделкәрим Күҫәкәй улына бирелде»[40] тигән өҫтәмә индергән. Манифест дөйөмләштерелгән йөкмәткегә эйә, ул Петр Федорович батшаға хеҙмәт итергә саҡыра, барыһына «ер, һыу, балыҡ тотоу, бесәнлек, һөрөнтө ер, урман, дары, аҡса, ҡурғаш, икмәк, тоҙ һ.б.» вәғәҙә итә, буйһонмаған баяр, генерал, майор, капитандарҙың һ.б. «башын киҫергә, имениеһын тартып алырға» саҡыра.[41] Воскре-

сенск заводында Зарубин менән Антипов Бәхтейәргә яңы указ бирә, уның хәрби хәлен һәм бурыстарын аныҡлай. Бәхтейәр «...һәр ике йорттан берәр кешене, башҡорт, мишәр, татар, сирмеш һәм рустарҙы, кем булыуына ҡарамай», хеҙмәткә алырға тейеш.[42] Баш күтәреүселәр отряды үҙен барлыҡ кәрәк-яраҡ менән тәьмин итергә бурыслы. Бының өсөн Бәхтейәргә «туптарҙы, пулялрҙы, фузеяларҙы һ.б. ҡоралды, бер ниндәй иҫкәрмәһеҙ ... алырға» бойорола. Уға урында киң вәкәләтлектәр бирелә: ул «буйһоноусыларҙы үҙе менән йөрөтә, буйһонмағандарҙы буйһондора», «уның, император ғәли йәнәптәренең күңелен ҡырған һәм зыян килтергәндәргә» өгөт-нәсихәттәр уҡый, дошманына ташлана һәм ҡаршы тора; кем баш тарта, шулар менән алыша».[43]

«Петр Федоровичтың» манифесы һәм «граф Захар Чернышевтың» указы менән ҡоралланып, полк старшинаһы дәрәжәһендә, аныҡ бурыстар йөкмәп һәм полктың йөҙ башлығы Ғәбделкәрим Күсәкәев оҙатыуында Бәхтейәр 1773 йылдың декабрь уртаһында өйөнә, Себер даруғаһының Оло Аҡа ауылына ҡайта һәм иң тәүҙә ауылдаштарын, күрше мишәр, башҡорт һәм типтәр ауылдары халҡын үҙенең баш күтәреүселәр отрядына туплау өсөн әүҙем эшмәкәрлек йәйелдерә.[44] Ул ойошоп килгән полкын ҡорал, аттар, аҙыҡ-түлек, мал аҙығы һәм башҡа һуғыш кәрәк-ярағы менән тәьмин итеү сараларын күрә.[45]

Баш күтәреүселәр үҙәге ҡуйған бурыстарҙы үтәү өсөн сираттағы аҙым — яҡындағы заводтарҙы баҫып алыу. Уларҙың Аҡаға иң яҡын урынлашҡаны И.П.Оскиндың Саранин заводы була. Бәхтейәр Хәрби коллегияға: «...Саранин заводына дүрт кешене вәкил итеп ебәрҙек», тип рапорт бирә. Завод крәҫтиәндәре Бәхтейәрҙең кешеләрен заводҡа ете саҡырым барып етмәҫтән икмәк-тоҙ, «бер туп, ... дары, туҡһан өс йәҙрә, һигеҙ яҡшы фузея, ике яҡшы турка, ғәскәри ҡорал» менән ҡаршы ала.[46]

Баш күтәреүселәр отрядына күп кенә кешеләрҙе йәлеп итеп һәм уҡ-йәйә, ҡылыс һәм һөңгөләр менән генә түгел, туптар һәм атыу ҡоралы менән ҡоралландырып, Бәхтейәр төньяҡ Башҡортостан халыҡтары өсөн Көңгөр ҡалаһы менән бергә батша таянысы, феодаль һәм милли иҙеүҙең үҙәге булған Красноуфимск ҡәлғәһенә табан юлға сыға. Был үтә лә мөһим һәм тәү сираттағы мәсьәләне Бәхтейәр еңел һәм уңышлы хәл итә. «Рустар Ҡыҙылъяр ҡаласығынан ун һигеҙ саҡырым алыҫлыҡта беҙҙе ике туп менән ҡаршы килеп алды һәм үҙҙәре менән алып китте»,[47] тип хәбәр итә ул Хәрби коллегияға. Шулай итеп, Красноуфимск казактары үҙ теләге менән баш күтәреүселәр яғына сыға. Ҡәлғәгә килгәс, Бәхтейәр 4 тупты, 24 бот дарыны, бихисап йәҙрә, 6 мискә шарап һәм 90 тоҡ тоҙҙо конфискациялай. Байҙарҙың 36 атын, 2 һыйырын тартып ала һәм армияға аҙыҡ-түлеккә тапшыра, ә яҡшы аттарҙы «батшаға» ҡалдыра.[48]

Б.С.Дәүләтбаев, Красноуфимск ҡәлғәһенә Ҡәнзәфәр менән Салауатҡа тиклем беренселәр булып Бәхтейәр, Ғәбделкәрим һәм Себер даруғаһы Түбәләҫ олоҫоноң башҡорт старшинаһы Собханғол Килтәков

килгән, тип раҫлай.[49] Был фекерҙе Салауаттың күрһәтмәләре лә нығыта. 1775 йылдың 15 февралендә Сенаттың Йәшерен экспедицияһы алдында яуап тотҡанда ул: «...Грязнов полковниктар тип атаған һәм һуңынан Красноуфимск ҡәлғәһен ҡамаған башҡорттар, Собханғол менән Бәхтейәр, Салауатҡа бер башҡортто, Әүләзей Һаҡҡоловты һәм рус кешеһен, поп улы Макар Ивановты ебәрә, Салауат улар менән, теге полковниктар бойороуынса, Красноуфимск ҡәлғәһенә яуыздар эргәһенә килә», тип хәбәр итә.[50] 1775 йылдың 5 майында Өфө провинцияһы канцелярияһында һорау алғанда ла Салауат шундай уҡ мәғлүмәт бирә. Пугачев тарафынан Красноуфимск ҡәлғәһенә ебәрелгәс, ул яуыз полковниктар Бәхтейәр Ҡанҡаев менән башҡорт старшинаһы Собханғол Килтәковтың яуыздар төркөмөнә ҡушыла.[51] Салауаттың көрәштәше Раҡай Ғәлиев 1775 йылдың 6 апрелендә Ҡазан Йәшерен комиссияһында, Салауат менән «Красноуфимск ҡәлғәһенә барҙыҡ, унда артиллерияға казактар яллап, башҡорт старшиналары Мәүлит, Ҡәнзәфәр һәм Бәхтейәргә Көңгөрҙө яуларға ярҙамға киттек»,[52] тип һөйләй. Әммә Собханғол 1774 йылдың 4 февралендә Көңгөр ҡалаһында һорау алғанда Красноуфимск ҡәлғәһенә Салауат менән бергә уның ҡатнаш отрядында килеүен әйтә.[53] Бәхтейәргә килгәндә, ул Пугачев эмиссарҙарынан беренсе булып Красноуфимск төбәгендә пәйҙә була һәм Башҡортостандың төньяғында бөтә халыҡ көрәшен ойоштороу өсөн ҡыҙыу эш башлай. Ул старшиналар Алағуҙ Баҡиновтың, йөҙ башлыҡтары Ишәләй Ҡәҙрәлиевтың һәм Ҡотошевтың отрядтарын Красноуфимск казактарының отрядтары менән ҡуша, есаул Григорий Овчинников менән казак Максим Калашникты ҡәлғәне бөлгөнлөккә төшөргәне өсөн «сылбырға» ултырта.[54]

Тиҙҙән төньяҡ Башҡортостанға Ҡәнзәфәр Усаев, Салауат Юлаев, И.С.Кузнецов килә. Салауат отрядынан ҙур юлбашсылар, баш күтәреүселәр армияһы полковниктары, Ҡошсо олоҫо старшинаһы Илсеғол Этҡолов һәм шул уҡ олоҫ башҡорто Ишмән Этҡолов, мишәр, Бәхтейәрҙең ауылдашы Һөләймән Күҫәкәев үҫеп сыға. Бер төркөм йәш, талантлы һәм ғәйрәтле етәксе-полководецтарҙың пәйҙә булыуы төбәктә баш күтәреүселәр хәрәкәтен дөрләтеүсене артҡа ҡыҫырыҡлай. Артабанғы ваҡиғалар Бәхтейәрҙең оҫта ойоштороусы, ләкин уртаса хәрби командир булыуын күрһәтә. Йәштәрҙең унан өҫтөнлөк алыуы Бәхтейәрҙең хәтерен ҡалдырғандыр, күрәһең, был уның ҡалған ихтилал етәкселәре менән йыш низағлашыуының сәбәбе була. Ул Салауат өҫтөнән ошаҡ яҙып, уны ришүәтселектә, Бәхтейәр ҡулға алған һәм «сылбырға ултыртҡан» Овчинников менән Калашниктан «100 һум алып, үҙҙәрен азат итеүҙә» ғәйепләй. Йәнәһе, был ыҙғышта Бәхтейәрҙән Пугачев указын тартып алып, үҙен ҡарауыл аҫтына ултырталар һәм «бығаулап, аҫырға алып китәләр». Ҡурҡыуға төшкән Бәхтейәр 12 һум аҡса түләп ҡотола. Ошаҡта ул Хәрби коллегиянан шул аҡсаны, аттарын, 8 фузеяны һәм 2 турканы ҡайтарып биреүҙе талап итә.[55] Ул Илсеғол Этҡоловҡа ла зарлана. Белобородовҡа ебәргән хатында ул, Илсеғол төнөн иҫереп ауылға килде, «халыҡты ҡурҡытып, ҡайһы берҙәрен хөкөмгә тартты-

рып, күптәрҙе ҡыйырһытты, ...кешеләрҙе көсләп командаһына алды...»[56], тип яҙа. Белобородовҡа, Илсеғол Изге Әюповҡа көкөрттән дары эшләргә бирмәне, тип тә рапорт бирә.[57] Һөләймән Күсәкәев миңә асыу һаҡлай һәм ауылдың һайланма кешеләренә минең «указым буйынса ылау бирмәҫкә ҡуша», тип яҙа.[58] Ишмән Этҡоловты Т.Овчинников менән М.Калашникты хыянаттары өсөн ҡулға алырға теләүҙә, әммә һәр береһенән ике йөҙәр һум аҡса алып, азат итеүҙә һәм улар аша һәләк булыуҙа ғәйепләй.[59]

Даусыл холҡона ҡарамаҫтан, Бәхтейәр Красноуфимск—Көңгөр баш күтәреүселәр төбәгенең етәкселәр сафында ҡала. Ул 23 һәм 24 ғинуарҙа Көңгөргә һөжүм итеүҙә ҡатнаша, Красноуфимск районында Салауат, И.Кузнецов һәм Ҡәнзәфәр киткәндән һуң да ҡала. Бәхтейәр Салауат яраланып өйөнә ҡайтып киткәндән һуң Красноуфимск эргәһендәге баш күтәреүселәр отрядтарына етәкселек итеүсе Ҡошсо олоҫоноң Ҡыҙылбай ауылы башҡорто, полковник Ишмән Этҡоловтың үлеменең берҙән-бер шаһиты була. Бәхтейәрҙең хәбәр итеүенсә, Ишмән 1774 йылдың 19 февралендә секунд-майор Д.О.Гагриндың язалау командаһына ҡаршы яуҙа һәләк була.[60]

1774 йылдың яҙында ла Бәхтейәр көрәште туҡтатмай, төньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда хәрәкәт итә. 9 апрелдә Үрге Ҡыйғы ауылында ул Белобородовтың күрһәтмәһен ала. Унда Белобородовтың 4 апрелдә Хәрби коллегиянан «уның ғәли йәнәптәренең корпусын туплау һәм киң таратыу өсөн Төп армияға ебәрергә күп меңлек рус, башҡорт, сирмеш командаларын туплауҙы» талап итеүсе указ алыуы әйтелгән була. Шуға Белобородов Бәхтейәрҙе, атлы һәм ҡораллы командалар йыйып, Белобородовҡа килтереү шарты менән, Көңгөргә оҙата.[61]

Белобородов шунда уҡ Бәхтейәргә, йөҙ башлыҡтары Әбделкәрим Күсәкәевҡа һәм Йосоп Юнысовҡа, писарь Исмаил Имановҡа грамота яҙып бирә, унда халыҡҡа «тракт буйынса алға һәм кирегә... һис тотҡарлыҡһыҙ өс ылау бирергә» тигән талап ҡуйыла.[62]

Бәхтейәр Белобородов ҡуйған бер генә мәсьәләне лә хәл итә алмай. 17 апрелдә ул, бөтә ғәйепте был ваҡытта Көңгөр өйәҙе сиктәрендә хәрәкәт итеүсе Илсеғол менән Һөләймәнгә ауҙарып, Белобородовҡа рапорт яҙа. Йәнәһе, Илсеғол баярҙарҙың етенен һәм ыҫмалаһын алыуҙы тыя, дары етештерергә ҡамасаулай. Бәхтейәр Көңгөр өйәҙе буйлап кешеләр ебәрә, әммә уларҙы тыңламайҙар һәм командаларға яҙылмайҙар, «Көңгөрҙән дошман килә», тип белдерәләр. Бәхтейәрҙең ярҙамсылары Илсеғол менән Һөләймән отрядынан баш күтәреүселәрҙе үҙ яғына әүрәтергә теләгәндәрҙер, күрәһең. Шуға Илсеғол кешеләрҙе ихтыярһыҙлай һәм яуапҡа тарттырырға теләй, ә Һөләймән һайланма вәкилдәргә ылауҙар биреүҙе һәм рус казактарын ебәреүҙе тыя.[63]

Бәхтейәрҙең рапортына яуап итеп, Белобородов 28 апрелдәге ордеры менән «урындағы рустарҙы һәм татарҙарҙы» үҙенә кисектермәйенсә ебәреүҙе яңынан талап итә, баш тартҡан һәр кемде эҙләп табыу һәм аҫып үлтереү менән ҡурҡыта. Бәхтейәрҙең үҙенә Белобородов халыҡты

йыйып, ҡарауыл ҡуйырға һәм Көңгөрҙәге дошмандар һөжүменән сиктән тыш һаҡ булырға кәңәш бирә.[64]

1774 йылдың майында ла Бәхтейәр Көңгөр өйәҙендә хәрәкәт итә. Был хаҡта түбәндәге документтар һөйләй: 4 майҙа йөҙ башы Ишмәт Мәмәтҡолов Бәхтейәргә унының указын алыуҙарын һәм шуның буйынса тирә-яҡ ауылдарҙа һәм Көңгөрҙә эшләүҙәрен хәбәр итә. Ишмәт Бәхтейәрҙе Көңгөрҙә язалау көстәренең йәнләнеүе, 16 туптары барлығы, ошо көндәрҙә Алтин ауылына һөжүм итеп, атаман И.Васевты әсир итеүҙәре тураһында иҫкәртә.[65]

Төп ғәскәрҙең Башҡортостан территорияһына килеүе менән Бәхтейәр Көңгөр өйәҙе халҡын ихтилалға йәлеп итеү эшмәкәрлеген ҡыҙыулата. Башҡорт, татар, мишәр һәм мари хәрби етәкселәренә, старшина Ҡаныҡай Яшпохтинға, йөҙ башлыҡтары Осип менән Ишмәт Ишмәмәтовҡа, мулла һәм депутат Баҡыйға, йөҙ башлығы Иман Алладиновҡа Бәхтейәр «батшаның» уңыштары хаҡында хәбәр итә. Төп ғәскәрҙең ысынында Башҡортостандың Урал аръяғында хәрәкәт итеүенән тыш, Бәхтейәр халыҡты ихтилалға ылыҡтырыу маҡсатында башҡа һыймаҫлыҡ ваҡиғалар тураһында яҙа: баш күтәреүселәрҙең Ырымбурҙы алыуы һәм Кинйәне губернатор итеп тәғәйенләүе, төрки халыҡтарының Мәскәүҙе ҡамауы, 10 мең ҡаҙаҡтың Пугачевҡа ҡушылыуы һәм үҙҙәре менән армияға таратыу өсөн бөткөһөҙ ат, һыйыр, һарыҡ килтереүе һ.б.[66]

1774 йылдың йәйендә, Пугачев Төп ғәскәре менән төньяҡ Башҡортостан буйлап килгәндә, Бәхтейәрҙең ойошторооусы һәләте айырыуса ныҡ асыла. Был ваҡытта бөтә документтарҙа ла ул «полковник» тип атала. 13 июндә Осокиндарҙың Үрген заводы эргәһендә баш күтәреүселәр лагерында «Петр Өсөнсө» — Пугачевтың Бәхтейәр Ҡанҡаевҡа һәм Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтовҡа исемле указы төҙөлә. Был указ Бәхтейәрҙең «рус һәм башҡорт ғәскәрен йыйыу өсөн бойороҡ» ебәрергә һорауына Пугачевтың яуабы була. Унда «полковник Ҡанҡаевтың һәм старшина Ҡәҙермәтовтың Ҙур армияға рус һәм башҡорт ғәскәрен йыйырға нисек тә тырышыуы һәм яуыздарға ҡаршы тороп, беҙҙең батшалыҡҡа буйһонмаусыларҙы юҡ итеүе» талап ителгән.[67] Указды есаул Сәлих Наурузов алып барып еткерә, уға «старшина Бәхтейәр Ҡанҡаев менән унының иптәштәренә» төбәлгән ғәли йәнәптәренең юл грамотаһы бирелә.[68]

Эйе, есаул Сәлих Наурузов Пугачев указын Бәхтейәргә тапшыра, сөнки ул указ башҡа документтар менән бергә унының отряды 1774 йылдың 27 июлендә Зюрей ауылы эргәһендә ҡыйратылғандан һуң Бәхтейәрҙең язалаусылар ҡулына эләккән поход канцелярияһында табыла. «Батша» указын алғас, Бәхтейәр бер юлы Бөрө һәм Кама буйы райондарында күп милләтле халыҡты ихтилалға йәлеп итеү өсөн киң эшмәкәрлек йәйелдерә.

Бәхтейәрҙең поход канцелярияһын ентекле өйрәнеү унының һуғыш хәрәкәттәрен күҙәтергә һәм 1774 йылдың йәйендә төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандағы дөйөм ихтилал күренешен аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итә.

1774 йылдың йәйендәге сыуалыштарҙа һәм мәшәҡәттәр эсендә Бәхтейәр халыҡты ихтилалға күтәреүҙе, яңынан-яңы отрядтар ойоштороуҙы тәүге сираттағы бурысы тип иҫәпләгән. 1774 йылдың 22 июнендә Бәхтейәр, Пугачевтың 13 июндәге указына таянып, Уса даруғаһы Уран олоҫо старшиналары Айыт Сәйетов, Ишкин Ураҙов һәм Федоска Йәнбаҡтинға Сарапул яғында һәм Кәҫлелә (Сарапулға ҡаршы Каманың һул ярындағы ауыл) нығынған дошманға ҡаршы торорға бойороп, фарман ебәрә. Бының өсөн улар тыныс халыҡтан һәр ихатанан берәр кешене, йортта өс кеше булһа — икәүһен баш күтәреүселәр отрядына алырға тейеш була. Отрядтарҙа таҙалыҡ һәм тәртип һаҡларға, бер кемде ҡыйырһытмаҫҡа һәм таламаҫҡа бойорола.[69]

Указдар, ордерҙар, күрһәтмәләрҙән тыш, Бәхтейәр төрлө төбәктәргә һәм ауылдарға үҙенең эмиссарҙарын һәм тотош отрядтар ебәргән. Әйтәйек, Суслов тирмәненә халыҡты Пугачевҡа ант иттереү өсөн ул старшина Зөлкәрнәй Йосопов етәкселегендә 100 кешелек отряд ебәрә.[70]

1773—1774 йылдарҙың ҡышында уның алыштырғыһыҙ ярҙамсыһы есаул Әбделкәрим Күсәкәев булһа, 1774 йылдың йәйендә уның ҡулы аҫтында көрәшеүсе һәм уның менән тығыҙ эш итеүсе бер төркөм ҙур етәкселәр үҫеп сыға. Ишбулды ауылынан татар полковнигы Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов, Гаврила Лихачев һәм Рахманғол Дүсләев, старшиналар Балтас Сәйетов һәм Абдулла Мостаев, полк писары Әбүбәкер Кләнсев шулар иҫәбенә инә. Улар халыҡты отрядтарға туплауҙа, аҙыҡ-түлек, мал аҙығы һәм ҡорал менән тәьмин итеүҙә, халыҡ йәшәгән урындарҙы, төп тракттарҙы һәм Кама, Вятка, башҡа йылғалар аша кисеү урындарын һаҡлауҙа, бәхәсле мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә даими ярҙам күрһәтә.

Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов июнь айында Бәҙрәш ауылы кешеһе Зәбир Мәйәтмәҫов аша поход старшиналары Айыт Сәйетов менән Исмай Түләкәевҡа «тиҙ арала һәр йорттан берәр кешене атҡа атландырып» баш күтәреүселәрҙең төп көстәренә ҡушылыу өсөн ебәреүҙе талап итеп, фарман ебәрә. Отряд үҙен «икмәк һәм ярма» менән тәьмин итергә тейеш була.[71] Бәхтейәр хәрәкәткә ойошҡанлыҡ һыҙаттарын бирергә тырышҡан, был реестрҙар, ведомостар, ихтилалсыларҙың исемлектәрен төҙөүҙә, хеҙмәт хаҡы түләүҙә сағылған.[72]

Баш күтәреүселәр отрядтарын аҙыҡ-түлек һәм мал аҙығы менән тәьмин итеү өсөн күп көс талап ителгән. Бәхтейәр был бурысты хәл итеүҙе хәстәрләгән. Поход старшинаһы Балтас Сәйетовҡа ебәргән бойороғонда ул Туҡтар кисеүен яҡындағы Бикмәт, Туҡраҡ, Аяҡ, Бәҙрәк ауылдары иҫәбенә кисектермәй тәьмин итергә ҡуша. Ара йыраҡлығын иҫәпкә алып, Бәхтейәр мәсьәләне урындағы халыҡ иҫәбенә хәл итеүҙе һәм «һәр биш йорттан бер һарыҡ биреүҙе» талап итә.[73] Отрядтарҙы ҡорал, аҙыҡ-түлек, дары, мал, аттар менән тәьмин итеү урындарының береһе итеп Бәхтейәр Шомбот араҡы ҡыуыу заводын файҙаланған.[74] Уның бойороҡтарын үтәүҙән баш тартыу осраҡтарында ул «ҡалмыҡтарға һәм башҡорттарға заводты яндырырға ҡушабыҙ» тип ҡурҡытҡан.[75] Бер билетта

уның отрядҡа 15 казак ебәреүҙе талап итеүе күрһәтелә.[76] Отрядтан сығарылған 5 завод эшсеһе өйгә ҡайтып, заводтан баяр малын — ике йөҙ һарыҡ, һыйыр булһа, барыһын да алып, бөтә аттарҙы — килтерергә тейеш була.[77] Икенсе осраҡта писарь Федор Игнатов Шомбот заводынан 125 һарыҡ, 10 ҡыҫҡа һөңгө, 4 ҡылыс, 2 мискә араҡы алыу хаҡында документ төҙөгән.[78] Отрядтарҙың резервтарын трофейҙар ҙа тулыландырған. Быға, атап әйткәндә, дозорҙың йөҙ башлығы Яков Ивановтың дошман һалдатын әсир итеүе һәм уның аттарын тартып алыуы тураһындағы рапорты шаһит.[79]

Баш күтәреүселәр лагерында һәм азат ителгән территорияла Бәхтейәр бәхәсле мәсьәләләрҙе хәл итергә, баш күтәреүселәр менән урындағы халыҡ арһындағы мөнәсәбәттәрҙе көйләргә тырышҡан, халыҡты талауға ҡаршы саралар күргән.[80] Ҡайһы саҡта халыҡ Бәхтейәргә ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Мәҫәлән, баш күтәреүселәрҙең командирҙары Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов, Ишкин Сәйетов, Йомай һәм Әмир Карачевтар язалаусыларҙың Бикмәт ауылы кешеләренең аттарын, ҡоралын һәм мөлкәтен тартып алыуына зарланған.[81]

Ойошторған отрядтарҙы Бәхтейәр Төп ғәскәрҙе тулыландырыу өсөн ебәреп торған.[82] Пугачевтың Ҡазанға 20 меңлек ғәскәр менән яҡынлашыуында, һис шикһеҙ, Бәхтейәрҙең һәм уның көрәштәштәренең дә тырышлығы бар. Урындағы күп отрядтар дошманға ҡаршы тора, тракттарҙы һаҡлай, язалау командаларының хәрәкәтен күҙәтә һәм был хаҡта бер-береһенә, Бәхтейәргә һәм Хәрби коллегияға даими хәбәр итеп тора.[83]

Бәхтейәр башҡа төбәктәрҙәге ихтилал етәкселәре менән киң бәйләнеш тота. Уларҙың күбеһе ярҙамға командалар ебәреүен һорап мөрәжәғәт итә. Йыш ҡына Бәхтейәр үҙе лә башҡа командирҙарҙан ярҙам һорай. Атаман Әҙил Бигәшев менән полковник Арыҫлан Ранғолов уның Бөрө янына һәм Әңгәсәк араҡы ҡыуыу заводына ҡоралы отрядтар ебәреүен күп тапҡырҙар талап итә.[84] Белобородов, командалар йыйып, Пугачев ҡарамағына ебәрергә бойора.[85] Башҡорт полковнигы Әбделйәлил Ырыҫҡолов менән атаман Алладин Биктуғанов Көңгөр районында язалаусылар менән көрәштә ярҙам һорай.[86] Шулай итеп, 1774 йылдың йәйендә Бәхтейәр төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда баш күтәреүселәр отрядтарын урынлаштырыу, күсереп йөрөтөү һәм йүнәлтеү буйынса диспетчер вазифаһын башҡара. Тарҡау хәрәкәтте ойоштороуҙа уның хеҙмәте ҙур.

1774 йылдың йәйендә Бәхтейәр айырыуса мөһим тракттарҙы һәм Кама, Волга, Ағиҙел һ.б. йылғалар аша сығыу урындарын күҙәтеүҙә тотоуҙа ҙур хеҙмәт күрһәтә.[87] Кисеүҙе һаҡлауҙы ойоштороу структураһы уның 1774 йылдың 21 июлендә Хәрби коллегияға ебәргән рапортында яҡшы сағыла: Бәхтейәр «... Кама менән Вяткалағы һәр кисеүҙә оло ҡарауыл ҡуйылған» тип хәбәр итә. Рапортта Камалағы Сокольск кисеүенә язалау командаһының яҡынлашыуы, әммә «беҙҙең ҡарауылдарҙың уларҙы был яҡҡа үткәрмәүҙәре» хаҡында әйтелгән. Шул уҡ

рапортта юлдарҙа дошман командаларын күҙәтеүсе пикеттар һәм дозорҙар ҡуйылыуы, төрлө урындарҙа йыйылған армиянан төрлө ҡорал менән 50—100 кешелек ҡарауылдар ҡуйылыуы хәбәр ителә.[88]

Бәхтейәр кисеүҙәрҙе шәхси күҙәтеү аҫтында тоторға тырышҡан. Йөҙ башлығы А.Федоровҡа һәм Кама, Вятка йылғалары буйында йәшәгән ауылдар халҡына ебәргән бойороғонда ул: «Был яҡҡа ла, ул яҡҡа ла дошман командаларын сығармаҫҡа! Ҡаты иҫкәртәм: кем дошмандың ҡайҙан килеүен ишетә, шунда уҡ ашығыс рәүештә миңә почта аша еткерһен», тип яҙа.[89] Был эштә уға Әбделйәлил Ырыҫҡолов, Әҙил Бигәшев, Балтас Сәйетов, Абдулла Туҡтаров һәм башҡа етәкселәр ярҙам итә.

Кисеүҙәрҙе һаҡлау урындағы халыҡҡа йөкмәтелә. Бәхтейәр крәҫтиәндәр араһынан йөҙ башлығы йә есаул һайлай, йәки үҙ кешеһен ебәрә. Ул кисеүҙе тәүлек әйләнәһенә күҙәтеүҙә тотоуҙы ойоштора, үҙенең командаһын аҙыҡ-түлек, аттар һәм ҡорал менән тәьмин итеүҙе хәстәрләй. Кисеүҙәрҙе йәки тракттарҙы һаҡларға тейеш булған ауыл һалым түләүҙән азат ителә.

Шулай итеп, халыҡты ихтилалға күтәреү, азат ителгән территорияла идаралыҡты һәм күҙәтеүҙе ойоштороу эшмәкәрлеге менән Бәхтейәр Пугачев һәм уның Төп ғәскәре төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан буйлап Усанан Ҡазанға иркен хәрәкәт итһен өсөн тыныс коридор булдыра. Пугачев Ҡазанға юл тотҡанда төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандың баш күтәреүселәр отрядтары уның Төп ғәскәренә ҡушылырға ынтыла. Уларҙың күбеһе Ҡазанға йүнәлә. Бәхтейәр ҙә Пугачевҡа ҡушылырға тырыша. Ул үҙенең отряды менән Урта Кама буйынан Ҡазан өйәҙенең Әр һәм Зюрей даруғалары биләмәләренә күсә. Уның отрядтарының авангардтары Ҡазан эргәһенә барып етә.

Ҡазанды алғас, июль уртаһында Пугачев ихтилал етәкселәренә Михельсондың язалау корпусы менән яуға инеү өсөн көстәрҙе бер урынға туплауҙы талап итеп фарман ебәрә.[90] Был указ ихтилал ғәскәрҙәренә һәм уларҙың командирҙарына Ҡазанға яу ойоштороу өсөн ҙур этәргес көс булған. Бергә һуғышҡа инеү өсөн көстәрҙе берләштереү буйынса полковник Гаврила Лихачев Бәхтейәргә, Бәхтейәр, үҙ сиратында, Лихачевҡа мөрәжәғәт итә.[91] Кама буйына Ҡаранай Моратов отрядының килеү хәбәрен улар ҡыуанып ҡаршылай. Бәхтейәр менән Лихачев Ҡаранайға ла берләшергә һәм бергә Ҡазанға Пугачевҡа барып ҡушылырға саҡырып мөрәжәғәт итәләр.[92]

Әммә төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандың күп хәрби етәкселәренә Пугачевтың Төп ғәскәренә ҡушылыу насип булмай. Бәхтейәр ҙә Пугачев менән берләшә алмай. Ул халыҡты баш күтәреүселәр отрядтарына йыйыуҙы, тракттарҙы һәм Кама менән Вятка кисеүҙәрен күҙәтеүҙә тотоуҙы дауам итә.[93] Был ваҡытта Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов менән Гаврила Лихачев, старшина Абдулла Мостаев Бәхтейәрҙең яҡын һәм ышаныслы арҡаҙаштары була. Пугачевтың Волга аръяғына сығыуы менән Михельсондың язалау отряды Төп ғәскәрҙе эҙәрлекләп китә. Башҡортостан

һәм Ҡазан губернаһы территорияһын хөкүмәт ғәскәрҙәре баҫып ала. Бәхтейәр һәм уның көрәштәштәре хәрәкәт иткән төбәктә полковниктар С.Б.Неклюдов, А.Ф.Обернибесов, М.Н.Кожин һәм Ю.Б.Бибиковтың язалау корпустары, майорҙар В.Меллин, В.Юшков һ.б. отрядтары ҡыҙырып йөрөй. Бәхтейәрҙең, Лихачевтың, Мостаевтың сиреүҙәре оҙайлы ғына ваҡыт эсендә язалау көстәренә уңышлы ҡаршы тора ала. Әммә Крәҫтиәндәр һуғышының ахыры яҡынлашып килә. Көрәште артабан да дауам итеү торған һайын ауырлаша, ҙур көсөргәнешлек талап итә, юлбашсылар мөхитенә ҡырҡыулыҡ индерә.

23 июлдә Лихачев, язалау командаһының яҡынлашыуына бәйле, Бәхтейәргә Меретәк ауылына ярҙамға ҡоралды отряд ебәреүен һорап яҙа.[94] Ул язалау командаһы 22 июлдә кисен Балыҡлы биҫтәһенән Зюрей даруғаһына полковник Неклюдов корпусынан ебәрелгән разведка отряды була.[95] Был хаҡта Бәхтейәр ҙә белә. Шул уҡ көндө, йәғни 23 июлдә, ул Лихачевҡа Меретәк ауылын һәм уның әйләнә-тирәһен язалаусыларҙан үҙ көстәре менән яҡларға бойороп фарман ебәрә. Үҙенең көрәштәшен ул, яҡында ғына «батшаның» 20 меңлек армияһы тора, тип кеше ышанмаҫлыҡ хәбәр менән тынысландырырға ҡарар итә. Ул саҡта Бәхтейәр үҙе 2 меңлек сиреүе менән Зюрей ауылында нығына.[96]

24 июлдә Лихачев Бәхтейәрҙең Меретәк ауылына килеүен һәм берләштерелгән көстәр менән полковник Неклюдовтың деташаменттары урынлашҡан Балыҡлы биҫтәһенә һөжүм итеүҙе һорап, рапорттар һәм хаттар яуҙыра.[97] Ләкин Бәхтейәр Лихачев менән ҡушылырға ашыҡмай, есаул У.Ивановҡа һәм йөҙ башлығы И.Михайловҡа, баш күтәреүселәр отряды командиры Г.Сабаевҡа командалар туплауҙы, Кама кисеүен һаҡлауҙы талап итеп бойороҡтар ебәрә.[98]

Ул арала Лихачев Балыҡлы биҫтәһенән 15 саҡырым алыҫлыҡта ятҡан Байтирәк ауылында нығына һәм Бәхтейәрҙе ярҙамға саҡырыуын дауам итә.[99] Ул 400 кешелек отряд башында тора. Ҡаранай отряды менән берләшеү өмөтө лә аҡланмай.[100] Ауыр хәлдән һуңғы сиккә еткерелгән Лихачев 25 июлдә, Бәхтейәрҙе бергә көрәшеүҙән баш тартыуҙа ғәйепләп, һуңғы рапорт ебәрә. Шул уҡ көндө, 25 июлдә, Байтирәк ауылы янында Неклюдов корпусы менән алышта Лихачев отряды еңелә, командир үҙе өс арҡаҙашы менән Вяткаға ҡаса.[101] Шулай итеп, баш күтәреүселәрҙең әҙерлекле хәрби отрядтарының береһе юҡҡа сыға, ә Бәхтейәр ышаныслы һәм булдыҡлы көрәштәшенән яҙа.

Бынан алдараҡ полковник Абдулла Мостаев та шундай уҡ яҙмышҡа дусар була. Яңы отрядтар йыйыу һәм Кама аша Шуран кисеүен һаҡлау өсөн ебәрелеп, ул Бәхтейәрҙең төп көстәренән айырыла, һуңғы рапортында ул Бәхтейәргә тәүҙә 20, һуңынан тағы 110 кеше йыйып ебәреүен хәбәр итә. Әммә артабан уның хәле ҡырҡыулаша. Күпселек халыҡ июнь башында уҡ Пугачевтың Төп ғәскәренә алынған була. Уларҙың байтағы һәләк була йәки әсир ителә, йә яралы һәм ауырыу хәлендә өйҙәренә ҡайтарыла. Йөҙ башлығы Әҙһәм менән Хәмит муллаға команда йыйырға ҡушыла, ләкин улар ауырыған булып сыға.

«Ә ул икәүҙән башҡа беҙ бара алмайбыҙ», — тип яҙа Абдулла Бәхтейәргә һуңғы рапортында.[102] 14 июлдә секунд-майор В.Меллиндың язалау командаһы менән һуғышта Абдулла еңелә.[103]

Бәхтейәрҙең көрәштәштәре араһынан иң һуңғы ҙур етәкселәрҙән полковник Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов ҡала. Һуңғы документтарҙа ул үҙен «баш полковник» тип атай. Бәхтейәргә ебәргән мәғлүмәттәренең береһендә Йәрмөхәмәт Ағирҙе ауылына дошман килеүен һәм уны яндырырға йыйыныуын хәбәр итә. «Беҙ дошманға ҡаршы торорға әҙерләндек», — тип яҙа Йәрмөхәмәт һәм Бәхтейәрҙең «хатты алғас та әҙерләнеп сығыуын» үтенә. Әммә был осраҡта ла Бәхтейәр өндәшмәй һәм Йәрмөхәмәткә ярҙамға ашыҡмай. Был алышта Йәрмөхәмәт уңышһыҙлыҡҡа осрай һәм ҡалған яугирҙары менән Салауат, Әбделйәлил Ырыҫҡолов, Байкей Тойкиев, Алладин Биктуғанов, Арыҫлан Ранғолов отрядтары хәрәкәт иткән Уса даруғаһы сиктәренә сигенә.[104] 27 июлдә Зюрей ауылы янында Бәхтейәрҙең 2 меңлек отряды ҡыйратыла. Бәхтейәр үҙе Кама яны урмандарында эҙ юйҙыра.[105] Уның тоғро көрәштәштәре, писарҙар Алексей Поторчинов менән Әбүбәкер Кләнсев әсир ителә, һуңғыһына Ҡазан Йәшерен комиссияһы шундай хөкөм сығара: «Халыҡҡа мөрәжәғәт яҙған ҡулын, аҙаҡ башын киҫергә».[106]

Батша властары Бәхтейәрҙе оҙаҡ һәм һөҙөмтәһеҙ эҙләй. 18 ноябрҙә генерал И.С.Потемкин Ҡазан Йәшерен комиссияһына биргән бойороғонда «баш фетнәселәрҙе, мәҫәлән, Кинйәне, Салауатты, Илсеғолдо һәм Ҡанҡаевты комиссияға килтерергә», тип иҫкәртә.[107] Әммә властар Бәхтейәрҙе таба ла, хөкөмгә тарттыра ла алмай. Документтар менән шығырым тулы поход канцелярияһын ҡалдырып, ул юҡҡа сыға.

Бәхтейәрҙең баш күтәреү эшмәкәрлеген күҙаллау шуны күрһәтә. Ул оҙайлы ваҡыт эсендә — 1773 йылдың декабрь башынан 1774 йылдың июль аҙағына тиклем төньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда баш күтәреү хәрәкәтен ойоштороуҙың ғәҙәттән тыш оҫтаһы булған. Бәхтейәр башҡаларҙан айырылып торған, ҡатмарлы холоҡло, тынысмаусан кеше булған. Ихтилал өсөн иң киҫкен мәлдә көрәштәштәре менән ғауға ҡуптарған, тәүәккәл хәл итер мәлдә өндәшмәй ҡалған һәм, киреһенсә, иң ҡулай булмаған ваҡытта уйламаған ҡарарҙарға килгән. Лихачев менән Йәрмөхәмәт уны хаттарға яуап бирмәгәне һәм отрядтары менән ҡушылырға бармағаны, яуапһыҙлығы өсөн тәнҡитләгән. Әҙел Бигәшев менән Алладин Биктуғанов Бәхтейәрҙе 1774 йылдың июнендә, башҡа етәкселәр менән килешмәйенсә, уларҙы Бөрө эргәһендә ташлап, Сарапул яғына китеүҙә ғәйепләй. Халыҡты ихтилалға күтәреүҙә ҙур тәжрибә туплауына һәм оҫталыҡ, сослоҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, Бәхтейәр уртаса ғына хәрби командир булған. Дөрөҫөрәге, ул үҙаллы бер генә ҙур яуға ла инмәгән.

Шуға ҡарамаҫтан, Бәхтейәр Ҡанҡаев Крәҫтиәндәр һуғышы тарихында ҙур урын тота. 1773 йылдың декабрендә Себер даруғаһы башҡорттарын, мишәрҙәрен, мариҙарын ихтилалға йәлеп итеүҙә уның хеҙмәте ҙур. 1774 йылдың йәйендә төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан халҡын яуға

әҙерләп, ә Пугачев Ҡазанға юлланғас, уға ябырыласаҡ бихисап язалау көстәрен албырғатыу өсөн «икенсе фронт» асып, баһалап бөтөргөһөҙ эш күрһәтә.

Бәхтейәр тыуған ерен социаль һәм милли иҙеүҙән ҡотҡарыу өсөн ғәҙел көрәшә. Ул күп тапҡырҙар яңылышҡан, әммә хәленән килгәнсә һәм булдыра алғанса һуғышҡан. Шуға күрә халыҡ күңелендә һәм йөрәгендә ул лайыҡлы урын алған.

## ИҪКӘРМӘЛӘР:

[1] Крестьянская война. 220-се б.

[2] Шунда уҡ. 401-се б.

[3] Шунда уҡ. 220-се б.

[4] РГАДА. Ф. 512. Ч. Л. 597 и об.

[5] Шунда уҡ. Л. 597 об.

[6] Крестьянская война. 359-сы б.

[7] Крестьянская война. 221-се б.

[8] РГАДА. Ф. 1100. Д. 9. Л. 53.

[9] Шунда уҡ. Ф. 6. Д. 512. Ч. 2. Л. 599.

[10] Шунда уҡ. Ф. 6. Д. 508. Ч. 2. Л. 32; РГВИА. Ф. ВУА. Д.143. Л. 205 об.; Дубровин Н.Ф. Пугачев и его сообщники. Т.2. 382-се б.; Усманов А.Н. Кинзя Арсланов — выдающийся сподвижник Пугачева // Исторические записки. Т.71. М.; 1962. 127-се б.

[11] РГАДА. Ф. 1100. Д.9.Л.53 об.

[12] Шунда уҡ.

[13] РГАДА. Ф. 6. Д.592. Л.576 об.

[14] Крестьянская война. 176-сы б.

[15] Шунда уҡ. 225-се б.

[16] Шунда уҡ. 221-се б.

[17] Шунда уҡ. 198, 400-се б.

[18] Шунда уҡ. 221-се б.

[19] Шунда уҡ. 222-се б.

[20] Крестьянская война. 215-се б.

[21] РГВИА. Ф. 20. Д. 1240. Л. 519 и об.

[22] Крестьянская война. 221-се б.

[23] Шунда уҡ. 226-сы б.

[24] РГАДА. Ф. 6. Д.507. Ч.3. Л.27; Д. 512. Ч.1. Л. 314; Ч. 2. Л. 596-599 об.

[25] Шунда уҡ. Ф.6. Д.507. Ч.3. Л.221, 225.

[26] Крестьянская война в России. Т. III 429-сы б.

[27] РГАДА. Ф.6. Д. 593. Л. 285 об.

[28] Крестьянская война. 371-се б.; Документы Ставки. 443-сө б.

[29] Алишев С.Х. Документы свидетельствуют //Ҡыҙыл таң. 2 март, 1977 й.

[30] Давлетбаев Б.С. Большая Ока. История села. Өфө, 1992. 33-сө б.

[31] Документы Ставки. 44-се б.

[32] РГАДА. Ф.6. Д. 507. Ч.6. Л. 241. Әммә Ҡазан Йәшерен комиссияһы протоколдарынан күсермәлә ул Бәхтейәрҙе башҡорт тип атай. Ҡарағыҙ: РГАДА. Ф.6. Д. 507. Ч. 10. Л. 65.

[33] Крестьянская война. 301-се б.

[34] РГАДА. Ф.6. Д. 507. Ч. 4. Л. 220.

[35] РГАДА. Ф.6. Д. 507. Ч. 4. Л. 203 об.; 216, 217-218 об., 219 об. 298 об. — 299, 337 об., 557 об. — 558.

[36] Давлетбаев Б.С. Күрһ. хеҙм. 19-сы б.

[37] Шунда уҡ. 20-се б.

[38] Давлетбаев Б.С. Күрһ. хеҙм. 19-сы б.

[39] Документы Ставки. 37-38-се б.

[40] Документы Ставки. 38, 383-сө бб.

[41] Шунда уҡ. 37-се б.

[42] Шунда уҡ. 125-се б.

[43] Шунда уҡ. 125-126-сы бб.

[44] Бәхтейәрҙең тәүге көндәрҙәге эшмәкәрлеге Салауат өҫтөнән яҙған ошағында ентекле һүрәтләнгән. Ҡарағыҙ: Документы Ставки. 311-312-се бб.

[45] Воззвания и переписка вожаков. 107-108-се бб.

[46] Шунда уҡ. 107-108, 107-се бб.

[47] Шунда уҡ. 107-се бб.

[48] Шунда уҡ. 107-108-се бб.

[49] Давлетбаев Б.С. Күрһ. хеҙм. 34-се б.

[50] Крестьянская война. 301-се б.

[51] Шунда уҡ. 318-се б.

[52] Шунда уҡ. 311-се б.

[53] Шунда уҡ. 91-се б.

[54] Документы Ставки. 311-се б.

[55] Шунда уҡ. 311-312-се бб.

[56] Шунда уҡ. 293-сө б.

[57] Шунда уҡ. 312-се б.

[58] Шунда уҡ. 311-се б.

[59] Шунда уҡ. 312-се б.

[60] Документы Ставки. 290-291-се бб.

[61] Шунда уҡ. 290-291-се бб.

[62] Шунда уҡ. 291-се б.

[63] Шунда уҡ. 312-се б.

[64] Шунда уҡ. 293-сө б.

[65] Документы Ставки. 313-314-се бб.

[66] Шунда уҡ. 314-се б.

[67] Шунда уҡ. 44, 387-се б.; Крестьянская война. 188, 388-се бб.
[68] Шунда уҡ. 70, 397-398-се бб.
[69] Документы Ставки. 315-316-сы бб.
[70] Шунда уҡ. 315-316-сы бб.
[71] Шунда уҡ. 324-се б.
[72] Шунда уҡ. 302-303, 327-330, 350-352-се бб.
[73] Шунда уҡ. 327-330, 350-352-се бб.
[74] Шунда уҡ. 325-327, 337-се бб.
[75] Шунда уҡ. 326-сы б.
[76] Шунда уҡ.
[77] Шунда уҡ. 337-се б.
[78] Шунда уҡ. 340-сы б.
[79] Шунда уҡ. 349-сы б.
[80] Шунда уҡ. 320, 321, 325, 330, 331, 337, 338, 340, 350-се бб.
[81] Шунда уҡ. 321-се б.
[82] Шунда уҡ. 317, 325-се бб.
[83] Шунда уҡ. 331-333-сө бб.
[84] Шунда уҡ. 315-317, 322-327-се бб.
[85] Шунда уҡ. 290, 291, 293, 312-315-се бб.
[86] Шунда уҡ. 318, 320, 322, 323-сө бб.
[87] Шунда уҡ. 319, 322, 323, 330, 331, 341, 424-се бб.
[88] Шунда уҡ. 341-се б.
[89] Шунда уҡ. 330, 331-се бб.
[90] Шунда уҡ. 334-335, 447-се бб.
[91] Шунда уҡ. 334, 335, 338, 339-сы бб.
[92] Шунда уҡ. 336, 342-343-сө бб.
[93] Шунда уҡ. 326-332, 340-342, 346, 347-се бб.
[94] Документы Ставки. 343-сө бб.
[95] РГВИА. Ф. 20. Д. 1240. Л. 437-439.
[96] Документы Ставки. 344-се б.
[97] Шунда уҡ. 344-345-се бб.
[98] Шунда уҡ. 346-347-се бб.
[99] РГВИА. Ф. 20. Д. 1240. 475; Ф. 6. Д. 416. Ч. 2. Л. 135-136 об.; Документы Ставки. 344-345-се бб.
[100] Документы Ставки. 346-сы б.
[101] РГВИА. Ф. 20. Д. 1240. Л. 475.
[102] РГАДА. Ф. 6. Д. 416. Ч. 1. Л. 163; Пугачевщина. Т. 1. Док. 111; Документы Ставки. 347-348-се бб.
[103] Документы Ставки. 446-сы б.
[104] Крестьянская война в России. Т. III. 280-се б.; Гвоздикова И.М. Башкортостан накануне и в годы Крестьянской войны. 436-437-се бб.
[105] Документы Ставки. 382-се б.
[106] РГАДА. Ф. 6. Д. 467. Ч. 6. Л. 246.
[107] Крестьянская война. 263-264-се бб.